*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# ТАМЫРЛЫ ИЖАД



*Һөнәре-шөғөлө, эше-хеҙмәте буйынса «иң-иңдәрҙе» билдәләү ғәҙәте донъялағы һәр халыкта бар: шундайҙарҙы төрлө ярыштарҙа, конкурстарҙа, бәйгеләрҙә асыклайбыҙ. Мәғарифта ла үткәрелә улар.*

*Башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусылары араһында 2000 йылда республика буйынса үткәрелгән бәйгелә Әбйәлил районының Байым ауылынан* ***Мәүлиә Фәрит кыҙы Мансурова*** *еңеп сыккайны. «Йыл укытыусыһы—2000» менән бына быйыл якынданырак танышырға тура килде.*

Тәбиғәттең һәр миҙгеле үҙенсә гүзәл. Әбйәлил яҡтарында ҡыш бигерәк тә матур тойолдо. Ярайһы уҡ ҡалын ғына яуған ҡар, юлдарҙан үтеүҙе ҡыйынлаштырһа ла, ерҙе — сәсеүлектәрҙе һәм көтөүлектәрҙе, сабынлыҡтарҙы һәм урман араларын, йылға-күл буйҙарын, тау битләүҙәрен — ышанысһы ҡаплап ята. Тимәк, яҙғыһын ул иреп һеңәсәк тә йәй байлығын ишәйтеүгә, еребеҙҙе йәмләүгә хеҙмәт итәсәк. Әбйәлил хужалыҡтарында егерме беренсе быуаттың икенсе йылына ҙур өмөттәр бағлай халыҡ.

Уҡытыусыларҙың да өмөтө ҙур был йылға, киләсәк тормошҡа. Бөтә донъя башҡорттарының июндә үткәреләсәк II ҡоролтайы халҡыбыҙҙың һәм республикабыҙҙың алдағы тормошон тағы ла яҡшыраҡ итеүгә ышанысһы нигеҙ булдырыр, донъялар гел боларышлы тормаҫ, илебеҙҙең иҡтисади һәм мәҙәни үҫеше тәьмин ителер тип күҙаллай улар. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының өмөттәре иһә телебеҙҙең ысын мәғәнәһендә дәүләт статусында артабан нығыныуы, үҫеше менән бәйләнгән.

Киң информация саралары аша үлтереш, һуғыш, вәхшилек, ҡанһыҙлыҡ, бурлыҡ туҡтауһыҙ пропагандаланған заманда йәш быуын күңеленә хәҙерге мәктәп программалары менән үтеп инеүе, яңы, ысын кеше, граждандар тәрбиәләүе ауыр, ләкин йәмғиәт алдындағы бурысты намыҫ менән үтәргә кәрәк. Мәүлиә Мансурова, ана шул алдағы көндәребеҙҙе күҙ уңында тотоп, киләсәкте хәстәрләп, уҡыусыларға тәрбиә биреүҙең һөҙөмтәле ысулдарын тапҡан, минеңсә. Улар түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала: ата-бабаларыбыҙ тормошона, көнкүрешенә мөрәжәғәт итеү, уларҙың йән-тән үә рух ныҡлығы тураһында ихлас та, тәьҫирле лә әңгәмә ҡороу, халыҡтың бай тәжрибәһен йәлеп итеү, һуңғы осорҙа танылыу яулап, бик популяр булып киткән этнопедагогикаға ҡыҙыҡһыныу уятыу, сәләмәт тормош юлдарын-ысулдарын өйрәтеү, быларҙың

бөтөнөһөн фольклор һәм әҙәби материалдар, шулай уҡ хәҙерге тормош күренештәре менән дәлилләү, нығытыу. Кешелеклек, кеселеклек, әҙәп, белем — тәрбиә нигеҙҙәре. Тап ошоларға таянғанда, киләсәгебеҙ яҡты, өмөтлө буласаҡ. Шулай тип иҫәпләй Мәүлиә, һәм балалар, уларҙың ата-әсәләре менән эш иткәндә тарих һабаҡтарына психологик анализ яһай, кешелә иң яҡшы әхлаҡи сифаттар яралыуға нигеҙ ҡора. Һәр дәресе конкрет темалы, аныҡ маҡсатлы уның. Мәҫәлән, «Тотһаң ололар һүҙен, сәләмәт булырһың үҙең», йәки «Тамырың ныҡлы, күңелең яҡты булһын» тигән дәрестәре бик фәһемле, юғары кимәлдә үткән. Ябай ғына тема — «Кеше тормошонда ҡурсаҡтар» — мәҫәлән, тел һәм әҙәбиәт нескәлектәрен өйрәнеүгә, шулай уҡ ҡурсаҡтарҙың кеше тормошонда тотҡан ролен аңлауға, балаларҙа милли үҙаң тойғоһон тәрәнәйтеүгә ҡоролған.

Мәүлиә әсәһе Мөслихә инәйҙән, Байым, Рәхмәт, Туйыш ауылдарында йәшәүсе ололарҙан, һүҙ һәм ҡул оҫталарынан, ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын һаҡлаусыларҙан үҙләштергән тәжрибәһе дәрестәрҙә генә түгел, уларҙан тыш та үткәрелгән сараларҙы мауыҡтырғыс итеп уҙғарырға булышлыҡ итә, үҙенсәлекле асыштарға килтерә. Ана, Хәйбуллина Әнүәрә инәйҙе алайыҡ. Ул күп йылдар башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытҡан, ә хәҙер Мәүлиәнең класында — синыф өләсәйе. Ҙур яңылыҡ булған был, сөнки тап өләсәй-олатайҙар биргән борон ейән-ейәнсәрҙәргә иң шәп тәрбиәне. Бына ошо халыҡ педагогикаһының онотолған өлкәһен Мансурова хәҙер бик оҫта файҙалана. Әнүәрә инәй яҡшы хәтерле, асыҡ зиһенле, төплө фекерле; уның йәш быуынды тәрбиәләр, бәләҡазанан, сит йоғонтонан ҡурсалар өгөт-нәсихәттәре, аҡыллы нотоҡтары, изгелек юллаған хәҙистәре күп. Нисек инде оло кешенең ошо байлығын ҡулланмайһың! Мин үҙем Хәйбуллина инәйҙең ике йөҙҙән ашыу мәҡәл-әйтемен яҙып алып ҡайттым. Уларҙы үҙ эшендә Мәүлиә Фәрит ҡыҙы ла киң ҡуллана.

Әбйәлил төбәгенең ҡул оҫталарына бай икәнлеге күптән мәғлүм. Мәүлиәнең дәрестәрендә улар ҙа ҡатнаша. Күркәм балаҫтар һуғыусы Ҡәнәғәтова Әнисә Ғабдулла ҡыҙын алайыҡ. Алайыҡ сихри келәмдәр сигеүсе-бәйләүсе Мансурова Нурлығаян Ғатаулла ҡыҙын. Оҫталар ғына түгел, халыҡ педагогикаһы маһирҙары бит улар. Дәрес биргәндә ниңә файҙаланмаҫҡа! Файҙалана Мәүлиә. Уның дәрестәрендә йырсы Юртынбаева Хәтифә Шакир ҡыҙының да ҡатнашҡаны бар. Йыр аша тарихты, башҡорттоң моң-зарын аңлата ул. Йәш быуынға белем-тәрбиә би-



*Әбйәлил районы башҡорттарының ҡомартҡыларын һаҡлаусы, киләсәк быуынға еткереүсе инәйҙәр*

реү — ысынлап та бөтөн халыҡ эше! Ошонон менән дә алдыра Мәүлиә.

Хәтерләйһегеҙҙер: яҡшыраҡ өлгәшкәндәрҙе уртасанан түбәнерәктәрҙән айырыу бар — бер класта «хөртөрәктәр», икенсеһендә «яҡшыраҡтар». Байымда ла был ысул ғәмәлгә ашырылған һәм Мәүлиәгә өлгәшмәйерәк, уртасараҡ йөрөгәндәрҙән 5 «б» эләгә. Мансурова үҙ алдына маҡсат ҡуя: ике йыл эсендә «яҡшыраҡ» 5 «а» класына тиңләшергә! Хәҙер һүҙҙе Байым урта мәктәбе директоры Линиза Камил ҡыҙы Сәғәҙиеваға бирәйек.

— Бер үк синыфтың икегә бүленгән балалары әле өлгәшеү буйынса тиңләшеп кенә ҡалманы, бәлки ҡайһы бер позициялар буйынса «б»-лар «а»-ларҙы уҙып китте. Был — уҡытыусының эш һөҙөмтәһе! Ғөмүмән, Мәүлиә Фәритовна — ярышып эшләргә яратҡан шәхес. Уҡытыусыларҙың республика конкурсында даими ҡатнашып, һәр саҡ икенсе турға үтеп ҡайта торғайны. Һуңғыһында финалда еңде. Ә бит аҡыл, профессиональ оҫталыҡ бәйгеһендә көс һынашыр өсөн күпме һынау үтергә кәрәк?! Ижади йәһәттән күпме эҙләнергә, табыш-асыштарға юлығыр өсөн күпме көс түгергә тура килә!

Ысынлап та, илленән ашыу уҡытыусы ҡатнашҡан ярышта икенсе турға яртыһы үтә, ә финалға — бишәү генә. Юғары интеллектлы, киң эрудициялы, көслө рухлы мөғәллимдәрҙең һәр береһенең шәхси һыҙаттары, таланттары ла асыла быңдай бәйгеләрҙә. Матур, моңло тауышлы, боронғо башҡорт йырҙарын оҫта башҡарыусы, халыҡ йолаларын һәм ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын яҡшы белгән, телмәр оҫталығы менән дә ауыҙына ҡаратҡан Мәүлиә Мансурова үҙенсәлекле педагогик фекерләүе менән дә айырылып тора. Хәйер, бәләкәйҙән тилбер булған ул. Быны әсәһе Мөслихә инәй төрлө миҫалдар менән раҫлай ҙа:

— «Мөслихәнең шайтан таяғы» тип ирештерерҙәр ине уны, — тип ҡуя.

Синыф етәксеһе Мансурова «шайтан таяғы» түгел инде хәҙер. Психолог булараҡ, ауыр балалар менән эшләй. Һикһәненсе йылдарҙан алып уҡыусыларға, хатта өлкәндәргә ғәрәп графикаһын да өйрәтә. Ул уҡытҡан 13 егет һәм ҡыҙ — башҡорт теле һәм әҙәбиәте мөғәллимдәре. Бер уҡыусыһы «Мөслимә» дини институтын тамамлаған, икәүһе әле шунда белем ала.

РайонДың «Оҫҡон» гәзитендә уның тураһында Самат Фәйзуллин шулай тип яҙғайны: «М.Ф. Мансурова — үҙ эшенә мөкиббән киткән, уға бар ваҡытын биргән мөғәллимә. Уның етәкселегендә Байым уҡыусылары Бөрйән районында үткән республика «Һомай» фестивалендә уңышлы сығыш яһаны... Ул этнография буйынса үткәрелгән ғилми-ғәмәли конференцияларҙа йыл һайын ҡатнаша... Уны Сибай, Салауат, Учалы һәм башҡа төбәктәрҙә лә коллегалары бик ихлас ҡабул итә. Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреү институты белгесе Ф.С. Әминева менән берлектә курстарҙа дәрестәр бирҙе, лекциялар уҡыны. Былтыр ноябрҙә БДУ профессоры Л.F. Сәйәхова етәкселегендә үткәрелгән ғилми-ғәмәли конференциялағы докладын ғалимдар әҙер кандидатлыҡ диссертацияһы тип баһаланы...»

Мәүлиә Фәрит ҡыҙының мәктәптә индерелгән яңылыҡтарының береһе — уҡыусыларҙың «Күңел дәфтәре». Бында һәр кем үҙенең яуланған уңыштарын, башҡарған һәйбәт эштәрен генә теркәп бармай, бәлки яман ҡылыҡтарын да, уңышһыҙлыҡтарын да яҙа икән. Аҙна тамамланған һайын шуларҙы үҙе үк «бизмәнгә һала» ла анализлай, уңыштарын арттырыу маҡсатын ҡуя, яман эштәренән ҡотола... Минеңсә , бик матур алым. Кешене эске тәртипкә, үҙ-үҙеңә ситтән ҡарарға, үҙеңде контролдә тоторға өйрәтә. Был ғына ла түгел, теге йәки был факттарҙан сығып, анализлы фекерләү ҡеүәһен үҫтерергә ярҙам итә. Ауыл ерендә геүләтеп донъя көткән өс бала әсәһе Мәүлиә Фәрит ҡыҙы Мансурова башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренең статусын, бәҫен күтәреп кенә ҡалманы, башҡорт теле аша балалар күңеленә юл ярып, башҡа фәндәрҙе лә уның уҡыусылары бары тик «яҡшы» билдәләренә генә үҙләштерә алыуын эше менән раҫланы.